Күгәрсен районы Мораҡ ауылы

«Күгәрсенкәй» балалар баҡсаһы

# Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә танып белеү өлкәһе буйынса асыҡ дәрес

## Тема: «Башҡортостандың ете мөғжизәһе»

Тәрбиәсе: Сафина Н. А.

Мораҡ – 2020

# Тема : Башҡортостандың ете мөғжизәһе

**Маҡсаттар :**

- Башҡортостандың ете мөғжизәһе менән яҡындан таныштырыу;
- Һәр бер мөғжизәгә айырым туҡталып китеү һәм уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлыҡ уятыу;
- Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эшләү, һүҙ байлығын арттырыу, балаларҙың телмәрен үҫтереү;
- Башҡортостандың тәбиғәтенә, моңона, халыҡ ижадына, ҡомартҡыларына ҡарата һаҡсыл ҡараш һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** слайдтар, мольберт,мөғжизәләрҙең фотоһүрәттәре, буяу, ватман, елем, бал ҡорттары һүрәттәре, салфетка, ҡыл ҡәләм.

**Дәрес барышы**

1.**Ойоштороу мәле.**

- Бөгөн беҙгә ҡунаҡтар килгән, улар менән һаулыҡ һорашайыҡ.

( Һаумыһығыҙ!)

**Тәрбиәсе**: - Һаумыһығыҙ, балалар!
Хәйерле иртә!

**Балалар:** - Сәләмләйбеҙ һауаны
Именлек булһын өсөн,
Сәләмләйбеҙ Ер – әсәне
Беҙҙе туйҙырған өсөн,
Сәләмләйбеҙ дуҫтарҙы
Гел дуҫлыҡ булһын өсөн!

(балалар урындарына ултыралар)

2. **Төп өлөш.**

(ҡурай моңо яңғырай)

**Тәрбиәсе:** - Балалар! Ишетәһегеҙме, ниндәй сихри моң яңғырай. Был ҡурай моңо.

(таҡтала ҡурайҙың таждары)

- Был нимә?
- Нимә ул ҡурай?
- Ҡурайҙың нисә тажы бар?
  (дәрестең маҡсаты менән таныштырыу)
- Беҙ бөгөн һеҙҙең менән Башҡортостан мөғжизәләрен эҙләп сәйәхәткә сығасаҡбыҙ.
- Нимә улмөғжизә?
- Мөғжизә ул Башҡортостандың иң матур, бөтә донъяға билдәле булған урындары, байлыҡтары. Тимәк, бөгөн беҙ һеҙҙең менән 7 мөғжизәне эҙләп табырға тейешбеҙ. Беҙҙе сәйәхәткә тоғро юлдашыбыҙ, Аҡбуҙат, алып сығасаҡ. Әйҙәгеҙ уны саҡырайыҡ.
- (балалар телдәре менән ат сабып килгән тауыш сығаралар).

**Слайд 1**

( Аҡбуҙат һүрәте)

**Тәрбиәсе:** - Бына Аҡбуҙатыбыҙ осоп килеп тә етте. Аҡбуҙат һеҙгә таныщмы, балалар?

(балаларҙың яуаптарын тыңлау)

**Тәрбиәсе:** - Аҡбуҙатҡа ултырып, Башҡортостандың мөғжизәләрен эҙләп, сәйәхәткә юлланайыҡ.Ҡайҙарға алып барыр икән беҙҙе Аҡбуҙат?

(ат сапҡан тауыш сығаралар).

**Слайд 2**

(Салауат Юлаевтың һүрәте)

**Тәрбиәсе**: - Был ниндәй һүрәт, кем төшөрөлгән?

**Балалар:** - Был Салауат Юлаев һәйкәле.

(балалар үҙҙәренең белгәндәрен һөйләп бирәләр)

**Тәрбиәсе һығымта яһай:** - Дөрөҫ, Салауат Юлаев ул беҙҙең милли геройыбыҙ. Уның һәйкәлен Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөгә ҡуйғандар. Салауат Юлаев һәйкәле әллә ҡайҙан күренеп тора. Был, балалар, **беренсе мөғжизә**. Уны таҡтаға беркетеп ҡуйайыҡ.

(бер бала сығып С.Ю.-тың һүрәтен ҡуя)

**Тәрбиәсе:** - Юлыбыҙҙы дауам итәбеҙ.

(*тағы ла ат сабыуы тауышы ишетелә).*

**Слайд 3**

(Янғантау һүрәте)

**Тәрбиәсе:** - Был нимә? Был ниндәй тау икән?

( балаларҙың яуаптары)

**Тәрбиәсе һығымта яһай:**

- Тауҙың нимәһе мөғжизә булырлыҡ икән? Был беҙҙең планетала ер аҫтынан бер туҡтауһыҙ ҙур күләмдә йылылыҡ, эҫе пар, газ сығып торған берҙән бер урын.Тау янында химик элементтарға бай, шифалы йылға Ҡорғаҙаҡ урғыла. Был тауҙың эргәһендә санаторий төҙөлгән һәм кешеләр унда дауаланалар.

(Янғантау тип ҡабатларға)

**Икенсе мөғжизәбеҙ - Янғантау.**

( бер бала сығып тауҙың һүрәтен ҡуя)

**Тәрбиәсе:** - Күҙҙәрҙе йомоп Аҡбуҙатта еләбеҙ. Күҙҙәрҙе асайыҡ. Беҙ ҡайҙа килгәнбеҙ?Ниндәйҙер тауыш сыға.

( Сылтырап аҡҡан шишмә тауышы ишетелә)

**Слайд 4**
(Красноусол һүрәте)

**Тәрбиәсе:-** Балалар, был ниндәй ер икән? Бәлки, кемдеңдер булғаны барҙыр?

(балалар үҙҙәре аңлап, дөрөҫ яуап бирәләр)
**Тәрбиәсе.** - Эйе, был Красноусол минерал һыуҙары. Улар нимә менән дан тота икән? (балалар яуап бирә)
**Тәрбиәсе дөйөмләштереп әйтә:** - Был минерал һыуҙар кальций сульфатына, минерал тоҙҙарға һәм файҙалы микроэлементтарға бик бай. Шуның өсөн, һыуҙы дауалау өсөн дә ҡулланалар.
(Краснаусол минерал һыуы тип ҡабатларға)
Тимәк , тағы ла бер мөғжизәбеҙҙе таптыҡ. **Өсөнсө мөғжизә – Красноусол минерал һыуҙары.**
( бер бала сығып һүрәтте ҡуя)

**Күҙгә гимнастика**

**Тәрбиәсе.** - Күҙҙәрҙе йомоп, сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ.

**Слайд 5**
(Шүлгәнташ мәмерйәһе)

**Тәрбиәсе:** - Был нимә? Нимә ул мәмерйә?

- Унда нимә бар икән? Әйҙәгеҙ, инеп ҡарайыҡ.
- Был ни ғәләмәт?
- Ниндәй һүрәттәр был?
- Бәлки кемдеңдер Шүлгән мәмерйәһенә барғаны барҙыр?

(балаларҙың яуаптарын тыңлау)
**Тәрбиәсе йомғаҡлап әйтә:** - Еребеҙҙең йөҙөк ҡашы булған, данлыҡлы мөһабәт Шүлгәнташ мәмерйәһе. Мәмерйә стеналарында ҡыҙыл буяу (охра) менән ҡырағай ат, мамонт, носорог һүрәттәре эшләнгән. Был беҙҙең өсөн мөғжизәме , балалар? Эйе.
**Тимәк, беҙҙең дүртенсе мөғжизәбеҙ – ул Шүлгәнташ мәмерйәһе.**
(Шүлгәнташ тип ҡабатларға)
Шулай булғас, беҙ уны элеп ҡуяйыҡ.
(бер бала мәмерйәнең һүрәтен элә)
**Тәрбиәсе:** - Юлыбыҙҙы дауам итәйек. Аҡбуҙатыбыҙға ултырып еләйек.
(балалар ат саптан тауыш сығаралар)

**Слайд 6**
(«Урал батыр» эпосы һүрәте)

**Тәрбиәсе:** - Был балалар, «Урал батыр» эпосы – башҡорт халҡының баш китабы. Унда Урал батыр бөтә кешелектең, ер йөҙөндәге тереклектең үлемһеҙлеге өсөн көрәшә. Бөгөн беҙгә ошо эпостың бер нисә юлын ятлап күрһәтерҙәр.

(балалар эпосты ятлай)

**Тәрбиәсе: -** Афариндар. **Тимәк, бишенсе мөғжизәбеҙ – «Урал батыр» эпосы.** Уның да һүрәтен элеп ҡуяйыҡ.

( бер бала һүрәтте элә)

**Тәрбиәсе: -** Балалар, арып та киттек буғай . Аҡбуҙатыбыҙға ла ял кәрәк. Ергә төшәп бер аҙ ял итеп алайыҡ.

*(шул саҡ ҡайҙандыр ҡурай моңо ишетелә).*

*Балалар күҙҙәрен йомоп ҡурай моңон тыңлайҙар.*

- Ниндәй илаһи моң ағыла.
- Ҡайҙан сыға ул моң?

(балаларҙың яуаптары)

## Слайд 7

(ҡурай һүрәте)

**Тәрбиәсе:** - Нимә ул ҡурай? Тирә - яғығыҙға ҡарағыҙ әле. Ниндәй үҫемлек янығыҙҙа үҫеп ултыра?

Ҡурай – сатыр сәскәләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. Ҡурай ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡуйы үлән араһында үҫә. Ҡурай – ул башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.

- Уҡыусылар һеҙ уны тағы ла ҡайҙа күргәнегеҙ бар?

**Балалар: -** Ҡурай үләне башҡорт халҡының символы. Уның ете тажы, берләшкән ете ырыуҙы символлаштыра. Башҡортостандың флагында ла, гербында ла ҡурайҙың ете тажы һүрәтләнгән.

## Слайд 8

( Башҡортостан флагы һәм гербы һүрәттәре)

**Тәрбиәсе һығымта яһай: - Алтынсы мөғжизә - ҡурай.**

(бер бала ҡурай һүрәтен элә)

**(Бал ҡорттарының гөжләүе ишетелә).**

**Тәрбиәсе:-** Балалар, был ниндәй тауыш?

**Балалар**: - Был бал ҡорттарының гөжләүе.

**Тәрбиәсе:** -Улар нимә эшләй?

- Ни өсөн сәскәләргә ҡунғандар?

**Балалар**: - Улар сәскәләрҙән бал йыя.

## Слайд 9

( бал һүрәте)

**Тәрбиәсе һығымта яһай: -** Бал үҙенең составы һәм көсө буйынса һирәк осрай торған уникаль продукт. Төрлө балдар була: йүкә, ҡарабойҙай, сәскә балдары. **Тимәк , беҙҙең етенсе мөғжизәбеҙ табылдымы инде?**

(бер бала һүрәтте элә)

**Тәрбиәсе: -** Шулай итеп, беҙ һеҙҙең менән Башҡортостандың ете мөғжизәһен табып бөттөк. Ҡабатлап үтәйек.

**<u>Схема буйынса әйтеп үтеү.</u>**

**Тәрбиәүи момент**: - Эйе, беҙ Аҡбуҙат ярҙамында Башҡортостандың ете мөғжизәһен дә таптыҡ, улар менән яҡындан таныштыҡ. Ләкин беҙҙең иң ҙур бурысыбыҙ ҡалған бит. Ул ниндәй бурыс?

**Балаларҙың яуаптарын тыңлау һәм һығымта яһау**: Иң мөһиме - беҙ Башҡортостандың мөғжизәләрен һаҡлай белергә, үҙ республикабыҙҙы һөйөргә һәм уның менән ғорурланырға тейешбеҙ.

**Физминутка**

Беҙҙең ҡулдар ҡанат кеүек
Төрлө яҡҡа йөрөйҙәр:
Алға, өҫкә, уңға, һулға
Ағас кеүек бәүеләләр
Бал йыйырға осалар.

**Тәрбиәсе:** - Бал ҡорттары ниндәй тауыш сығаралар?
(бззз-бззз)
- Әйҙәгеҙ әле бөгөн, беҙ һеҙҙең менән, бал ҡорттарына бал йыйһын өсөн, матур сәскәләр ултыртайыҡ, ә бал ҡорттары аҙаҡ беҙгә осоп килерҙәр.
( <u>Ҡул суҡтарына гимнастика</u>)
(ҡыҙҙар сәскәләр эшләйҙәр, ә малайҙар бал ҡорттарын йәбештерәләр)

**Рефлексия**

**Тәрбиәсе:** - Бөгөн нимә тураһында һөйләштек?
-Улар нисәү?
Уларҙы нишләтергә кәрәк?
Мин һеҙгә ошо дәрестең иҫтәлеге итеп бүләк тә әҙерләнем.
(балаларға смайликтар таратам)













Назад




УРАЛ БАТЫР
УРАЛ-БАТЫР
URAL-BATUR
BAŞKURT HALK DESTANLARI





курай








Башкортостандың
ете мөғжизәһе




БАШҠОРТОСТАН

